# БАШҠОРТ ТЕЛЕ 1



# Хәрефтәр, өн



# ндәр илендә



СЫНБУЛАТОВА Ф. Ш.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ




**1-се класс өсөн дәреслек**

Яңыртылған 2-се баçмаһы

*Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раçланды*

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ · 2012

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
С 87

*Дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын*
*Федераль дәүләт белем стандарттары нигеҙендә төҙөлдө*

**Шартлы тамғалар:**

— уҡыу мәсьәләһе ҡуй

— өндәрҙе, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе күҙәт, сағыштыр

— тейешле интонация менән әйтергә, уҡырға өйрән

— билдәләнгән һүҙҙе һүҙлектән ҡара

— һорау төҙө; уны уҡытыусыңа (иптәшеңә) бир

ал-ма — һүҙҙе юлдан юлға күсереү өсөн ижеккә бүл

— диалог ҡор

— төркөмдә йә парлашып эҙләгеҙ

— күсереп яҙ

**Сынбулатова Ф. Ш.**
С 87 Башҡорт теле: Башҡорт мәктәптәренең 1-се класы өсөн дәреслек. Яңыртылған 2-се баҫмаһы. — Өфө: Китап, 2012. — 80 бит.

ISBN 978-5-295-05428-0

УДК 373.167.1:811.512.141
ТП—019/12 ББК 81.2 Баш-922

ISBN 978-5-295-05428-0

© Сынбулатова Ф. Ш., 2008
© Мөхтәруллин А. Р. һүрәттәре, 2008
© Яңыртылған. Сынбулатова Ф. Ш., 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

# Алфавит

**1.** Булат менән Бикә «Алфавит иле» тигән һүрәттә хәрефтәрҙе төркөмләп, йорттарға урынлаштырған. Улар хәрефтәрҙе ниндәй үҙенсәлектәре буйынса төркөмләгән? Һорау урынына төшөп ҡалған хәрефтәрҙе урынлаштыр.



● Һүҙҙәрҙе ҡулланып, һүрәт буйынса «Алфавит иле» исемле әкиәт төҙө.

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: йорт һалғандар, кәңәшләшкәндәр, оҡшаш өндәр, парлашып, бәхәс киткән, бергә йәшәргә, күңелле, татыу ғаилә, Тартынҡылар урамы.

2.

**Алфавит**

Алфавитта 42 хәреф. Унда 27 тартынҡы хәреф бар. Һуҙынҡылар — 13.

Мин уҡый беләм. Матур яҙам.

3. Хәрефтәрҙән һүҙҙәр төҙөп әйт.



4. Һәр рәттә артыҡ хәрефте билдәлә. Ни өсөн артыҡ булыуын аңлат.

1) а, ә, о, у, ы
2) ж-ш, з-с, г-к, ғ-ҡ, м-л
3) и, ү, ы, ә, ө

5. Һүрәт буйынса телдән мажаралы бәләкәй хикәйә төҙө. Уға исем ҡуш.



● Һүрәттәге 4 предметтың атамаһын алфавит тәртибендә әйт.

6. Эштәрҙе башҡар.

1. Алфавиттың тәүге ун хәрефен тәртип буйынса әйтеп сыҡ.
2. Алфавиттан ике өндө белдергән хәрефтәрҙе әйт.

Алфавитта 42 хәреф. Унда 13 һуҙынҡы, 27 тартынҡы, 2 билдә: ь (нәҙек), ъ (ҡалын) айырыу билдәләре.

2

## Хәреф һәм өн

1. Ҡайһы һүҙҙә бер хәреф ике өндө белдерә? Унда нисә өн?

### Буран

Эй ел выжылдай,
Буран геүелдәй,
Асыулы бесәй
Кеүек мырылдай.

(Ғабдулла Туҡай)

2. Һүҙҙең өн моделен төҙө. Унан һүҙҙе дөрөҫ итеп хәрефтәр менән яҙ.





[ҡ ы й а р]
ҡыяр

**3.** Һүрәтле диктант яҙ.







**4.** Тексты шыма уҡы. Уның йөкмәткеһе буйынса фекер алышығыҙ.

Билдәләнгән һүҙҙәрҙе яҙып ал. Уларҙы мәғәнәһенә ярашлы икенсе бер һүҙ менән алмаштырып яҙ.

## Тыңлауһыҙ ҡуян

Ҡуян балаһы әсәһен тыңламаны. Бәләкәс йылға аша һикерҙе. Ул уның киңлеген күҙаллай алманы. Бигерәк бәләкәй ине шул ҡуянҡай. Артҡы аяҡтары менән боҙға **һуғылды.** Боҙ ярылып китте. Ҡуян йылғаға **ауыша** башланы. Ул алғы аяҡтары менән ярға йәбеште. Әсәй ҡуян секунд эсендә балаһы аша ярға ырғыны. Уны ҡолаҡтарынан тартып сығарҙы.

— Яҙғы боҙға ярҫтыҡтай булһа ла ышанма, тиҙәр. — Ҡуян балаһы быны белмәй ине шул!

Өндө әйтәбеҙ һәм ишетәбеҙ.
Хәрефте күрәбеҙ һәм яҙабыҙ.
Өндө хәреф менән тамғалайбыҙ.

**5.**

## Сафлыҡ

Ҡыш. Тын ғына ҡар яуа. Бөтә тирә-йүн ап-аҡ. Һәр нәмә саф, таҙа. Тын алыуы рәхәт.

**6.** Кәрәкле һуҙынҡылар өҫтәп, предмет һәм уның билдәһен, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр төҙөп әйт.

Өлгө: **ҙ, н** — иҙән; **т, р, н** — торна һ. б.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | ҙ,н; | т,ш; | с,б,н | |
| | й,л; | ҡ,т; | ҡ,ҫ | |
| | б,р; | к,л; | ҡ,й; | й,р |

**7.** Һәр һүҙҙе транскрипциялa. Аҙаҡ хәрефтәр менән дөрөҫ итеп яҙ.





# 3 Һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр

**1.** Таблица нимә тураһында һөйләй? Өндәр һәм хәрефтәргә сағыштыр.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 🟡 | [ә] | [ө] | [ү] | [э] | [и] |
| 🔵 | [а] | [о] | [у] | [ы] | - |

**2.** Икешәр һүҙ төҙөп яҙ. Улар менән телдән һөйләмдәр төҙө.




**3.** Предмет атамаларын яҙ.











ал-ма **4.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеп яҙ.

## Иләү

Ҡарағай төбөндә **ҡырмыҫҡа** йорто. **Үҙендә** бик күп фатир. Унда ҡырмыҫҡалар йәшәй. Улар тегеләй ҙә былай йөрөп тора. Кемдер үлән ташый. Кемдер еләк **тәгәрәтә**... Берәү ҙә эшһеҙ тормай.

(Р. Сәйетборханова буйынса)

**5.** Парлы һүҙҙәр бер-береһенән нимәһе менән айырыла? Уларға ниндәй үҙенсәлек хас? Шундай һүҙҙәр уйлап әйт.

1) болон — ҡолон; 2) төтөн — төнөн; 3) тоҙло — боҙло; 4) морон — борон; 5) төплө — төрлө; 6) тәртә — кәртә

**6.**

## Туп

Таня илай ҡысҡырып,
Тубы төшкән йылғаға.
Ҡуйсы, Таня, илама,
Туп батмай ул йылғала.

(Агния Барто)

**7.** Һуҙынҡыларҙы ике төркөмгә бүлеп әйт. Бүленешен аңлат.




**8.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе уҡы. Шағир тәбиғәт күренештәрен нимә менән сағыштыра?

## Әкиәттәге кеүек

Ҡып-ҡыҙыл бер туп шикелле,
    **Ҡояш** сыҡты тәгәрәп.
**Елдәр** бышылдаған төҫлө:
    — Йүгерәйек бергәләп.
Шат **йылғаға** күҙ һаламын —
    Тулҡын өҫтөндә күбек.
**Урман** — тараҡ, **йылға** — көҙгө,
    Әкиәттәге кеүек!

(Ҡадир Әлибаев)

Һуҙынҡы өндәр: [ә], [ө], [ү], [и], [э]
[а], [о], [у], — [ы].
Һуҙынҡы хәрефтәр: ә, ө, ү, и, э, а, о,
у, ы, е, я, ё, ю.

## 4 Тартынҡы өндәр һәм хәрефтәр

**1.** Тартынҡыларҙы ике төркөмгә бүл. Ниңә улай бүлдең? Аңлат.




**2.** Һүҙҙең һуңғы ижеген асыҡла һәм дәфтәреңә яҙ. Яңғырау тартынҡылар аҫтына һыҙ.



се . . .     та . . .     өй . . .     те . . .

- Ниндәй һүрәт артыҡ? Ни өсөн?

**3.** Таблицаны ҡулланып, тартынҡы өндәр тураһында һөйлә. Таблицала ниндәй тартынҡылар юҡ? Ни өсөн?

| | | | | | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | Б | В | Г | Ғ | Д | Ҙ | Ж | З | Л | М | Н | Ң | Р | - | - | Й |
| | | П | Ф | К | Ҡ | Т | Ҫ | Ш | С | - | - | - | - | - | Х | Һ | - |

**4.**

## Февраль

Февраль — ҡыш айы. Ул иң һыуыҡ ай. Ул айҙа ҡар күп була. Әсе елдәр иҫә. Ай аҙағына көндәр йылый.

**5.** Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөп яҙ.



**6.** Тексты ң һөйләмдәрен тулыландырып уҡы.

## Март

Март — яҙҙың ____ айы. Ҡояш ____ йылыта. Ҡар ирей. ____ тамсылар ____.

# 5 Нәҙек һәм ҡалын әйтелешле һүҙҙәр

**1.** Шиғырҙың тәүге дүрт юлын ижеккә бүлеп, күсереп яҙ.

### Әшем көйлә...

Сигеү сикһәм —
Ебем йөйлә,
Иген икһәм —
Әшем көйлә.

Донъям бөтөн —
Ерле, өйлө,
Икмәгем бар,
Тормош көйлө.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина)

**2.** Һүҙҙең мәғәнәһен өлгө буйынса үҙгәртеп яҙ. Нәҙек әйтелешле һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ.

Ө л г ө : яҙ — аҙ — уҙ, ... .

биш, сәс, һала, тура

**3.** Предметтарҙы ике төркөмгә айыр. Быны нисек эшләнең? Аңлат.



**4.** Яңы һүҙ килеп сыҡһын өсөн, һүҙҙең бер хәрефен үҙгәрт йәки алып ташлап әйт.

| | |
|---|---|
| бара — бала, бөрә | ишәк — ... |
| ҡурай — ... | арыш — ... |

**5.**

## Халыҡ шулай әйтә

Һау булайым тиһәң, туя ашама, ҡуя аша.

Һаулыҡ — ҙур байлыҡ.

**6.** Шиғырҙан әйтелеше оҡшаш булған (рифмалы) һүҙҙәрҙе парлап яҙып ал.

### Өҫтәл янында

Ашаным бер төлкөнө,
Ҡыҙғанысмы, көлкөмө?
Крокодилды ашаным,
Фил кимерә башланым,
Барыһы ла табында —
Печеньелар ҡабында.

(Зарема Әхмәтйәнова)

7. Рифмалы һүҙҙәр менән телдән ике юллыктар төҙөп әйт.

Өлгө: ҡараны — тараны

Вәли көҙгөгә ҡараны,
Сәскәйҙәрен тараны.

бара — ҡара, шаян — баян, сөйҙө — көйҙө, көйөнөс — һөйөнөс, буялды — оялды

## 6 Һүҙҙе ижеккә бүлеү

1. Һүрәттәге предмет тураһында һөйлә. Ул һиңә ниндәй байрамды иҫеңә төшөрә? Ниндәй хис-тойғолар уята?



- 1. Тортта нисә шәм, шунса хәрефле ике һүҙ яҙ. Уларҙы ижеккә бүл.
  2. Торт нисә өлөшкә бүленгән, шунса ижекле ике һүҙ яҙ.

**2.** Тәүҙә бер ижекле, унан ике, өс ижекле һүҙҙәрҙе әйтеп сыҡ.

урам, исем, ер, сөгөлдөр, эш, бәшмәк, сәләмәт, артыш

● Иң оҙон һүҙҙә нисә ижек? Уны нисек билдәләнең?

**3.** Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөп яҙ.

рам, у; ға, ду; рөҫ, дө

**4.** Тексты уҡы. Йөкмәткеһен күршеңә һөйлә. Үҙеңдең бесәйең тураһында һөйлә.

## Ҡояшлы тупһала



Ишектән бесәйҙең башы күренде. Ул алғы тәпәйҙәре менән тупһаға баҫты. Муйынын һуҙып һауаны еҫкәне. Тирә-яҡҡа күҙ һалды. Унан йомшаҡ ҡына баҫып тупһанан төштө. Ҡояшта ниндәй рәхәт! Мыраубикә таҡтаға һуҙылып ятты. Ул иркәләнеп күҙҙәрен йомдо.

5. Һүрәтле диктант яҙ.

  .

  .

  .

6. Шиғырҙы уҡы.

## Бәпембә сәскәләре



Һыу буйында сипылдашып
Килһә ҡаҙ бәпкәләре,
Шул ҡәҙәре шатланалар
Бәпембә сәскәләре.

Шатланалар ҙа сәскәләр,
Үҙ таҡмағын әйтәләр.
Сонтор ҡанаттарын елпеп,
Бейеп китә бәпкәләр.

(Абдулхаҡ Игебаев)

● 1. Шиғырға ҡарата телдән «һүрәт төшөр» ҙә уны һөйлә.

2. Шиғырҙан ике ижекле һүҙҙәрҙе табып әйт.

Һүҙҙә нисә һуҙынҡы булһа, шунса ижек. Мәҫәлән:

**аҡ** — 1 ижек, **аҡ**-бур — 2 ижек.

## 7 Һүҙҙе юлдан юлға күсереү

? **1.** Һөйләмдәге һәр һүҙҙе ижеккә бүлеп әйт. Һәр һүҙҙә нисә ижек? Билдәләнгән һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеп яҙ.

1. Ҡоштар **яҙҙы** маҡтап һайрайҙар.
2. Төлкө ҡойроғо менән **эҙҙәрен** һепереп **үтте.**
3. Ҡошсоҡ әсәһен бик оҙаҡ **көттө**, асығып **бөттө.**
4. **Ҡыҙҙар еләккә китте.**

**2.** Һүҙҙәрҙе өлгөләгесә ҡуш тартынҡылы итеп үҙгәрт. Унан ижеккә бүлеп әйт.

Өлгө: хат — хаттар, хат-тар

ҡаҙ, һөт, болот, кәрәҙ

3. Һөйләм төҙөп яҙ.

 

 

4. Ижектәрҙән ҡуш тартынҡылы һүҙ яһа. Уларҙы өлгөләге кеүек ижеккә бүлеп яҙ.

Өлгө: батты — бат-ты.

| | | | |
|---|---|---|---|
| бат | те | ҡуҙ | ҙе |
| һүт | ты | күҙ | ҙы |

5. Һүрәт урынына һүҙ ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсер.

Һоросай  эсеп бөттө.

Ғәлиә менән Сәриә  китте.

 икене ал.

**6.** Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөп әйт.




Һүҙҙең бер генә хәрефе юлда ҡалдырылмай һәм икенсе юлға бер генә хәреф күсерелмәй.

Дөрөҫ: ба-ла, иген-се

8 **Тикшереү эше**

9 **Баш хәреф. Исем-фамилияларҙың яҙылышы**

**1.** Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлат.

Салауат Юлаев
Мостай Кәрим
Александр Пушкин

**2.** Уҡы. Баш хәреф менән яҙылған һүҙҙәрҙе тап. Улар ниндәй һүҙҙәр? Нисек яҙылалар? Аңлат.

**Өфөлә 1-се гимназия Рәми Ғарипов исемен йөрөтә. 20-се гимназия — Фатима Мостафина исемендә. Баш ҡалала Мәжит Ғафури исемендәге парк бар. Әхмәтзәки Вәлиди урамындағы парк Александр Матросов исеме менән атала.**

● Текстағы шәхестәр тураһында нимә беләһең? Һөйлә. Белмәһәң, һораш.

**3.** Һүрәттәр буйынса телдән һөйләмдәр төҙө. Балаларға исем ҡуш.





 **4.**

Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Сафуан Әлибаев, Гөлфиә Юнысова

Кеше фамилияһы, исеме, атаһының исеме баш хәрефтән яҙыла:
**Аҡъюлова Гөлсөм Әсләм ҡыҙы.**

# 10 Хайуан ҡушаматтары

**1.** Йорт хайуандарының ҡушаматтары менән таныш. Уларҙы дәфтәреңә күсереп яҙ.

Әнисәнең бесәйе Һоросай ҡушаматлы. Мансурҙыҡы — Иркәбикә. Айнурҙыҡы — Мыяубай. Таһирҙың эте — Ҡараҡолаҡ.

- Бесәйегеҙҙең йә этегеҙҙең ҡушаматы нисек? Һөйләгеҙ.

Хайуан ҡушаматтары баш хәрефтән яҙыла: **Ҡупшыҡай (бесәй), Аҡбай (эт), Ҡуңырбуға (һыйыр).**

**2.** Хайуандарға тышҡы ҡиәфәттәре буйынса ҡушамат бир.









3. Һүрәтте ҡара. Унын буйынса һөйләшеү ҡороғоҙ.



1. Һүрәттә нимәләр төшөрөлгән?
2. Аҡлан һиңә оҡшаймы?
3. Иң оҡшағаны нимә булды?
4. Кейектәр ни менән мәшғүлдәр?
5. Тейен балаһы терпеләргә нимә әйтергә теләй?
6. Һүҙҙәрҙе ҡулланып, телдән ҡыҫҡа әкиәт төҙө, һөйлә.

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: гөл-баҡсалай, хуш еҫле сәскәләр, матур аҡлан, күп төрлө, һоҡланып ҡарай, ҡәнәғәт, сәләм бирҙе, тирә-яҡ нурланды, ҡышҡа әҙерлек, аҙыҡ, күреп шатланды.

**4.** Хайуандарға ни өсөн шундай ҡушамат бирелгән? Аңлат. Үҙеңә оҡшағандарын яҙып ал.

Аҡтояҡ, Аҡтүш, Ҡарабай, Аҡъял, Йондоҙҡашҡа, Бүләкбикә, Ҡарағолаҡ, Наҙлыҡай, Дүрткүҙ, Аҡтырнаҡ

**5.** Транскрипцияны асып, күсереп яҙ.

### Тоғро дуҫтарым

Өйҙө көн-төн ҡарарға
Ҡуштым тоғро [аҡбайға].
Алты бәпкәне һаҡларға
Бойороҡ бирҙем [сарбайға].

11

## Ер-һыу атамалары

**1.** Баш хәреф менән яҙылған һүҙҙәрҙе тап. Уларҙы үҙең йәшәгән ер-һыу атамалары менән алмаштырып уҡы.

### Тыуған төйәк

Минең тыуған республикам — Башҡортостан. Уның баш ҡалаһы — Өфө. Мин йәшәгән ҡала — Сибай. Бында Әхмәтзәки Вәлиди урамы бар. Ҡала театры Арыҫлан Мөбәрәков исемен йөрөтә. Эргәнән Төйәләҫ йылғаһы аға.

**2.** Һорауҙарға яуап бир.

1. Нимә төшөрөлгән?

2. Был карта тураһында нимә әйтә алаһың?

3. Картала ҡалалар Башҡортостандың ҡайһы өлөшөндә (көньяҡ, төньяҡ, көнбайыш, көнсығыш) урынлашҡан? 4 ҡала исемен күсереп яҙ.




● Сиктәш өлкәләрҙең, республикаларҙың исемдәрен картанан тап. Уларҙы әйтеп сыҡ.

**3.** Һорауҙарға яуап бир. Районың тураһында һөйләргә өйрән.

1. Һин йәшәгән район нисек атала?
2. Уның үҙәге нисек исемләнә?
3. Район аша ниндәй йылғалар аға?
4. Күлдәр бармы?
5. Ниндәй тауҙар бар?
6. Билдәле шәхестәре кемдәр?

**4.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр ҡуйып, күсереп яҙ.

Мин Башҡортостандың ... районында йәшәйем. Беҙҙең ауылдың исеме ... . Ул ... буйында.

**5.** Ҡала исемдәрен ике төркөмгә бүл. Ниндәй үҙенсәлек буйынса төркөмләнең?

Учалы, Мәскәү, Ағиҙел, Санкт-Петербург, Нефтекама, Орёл, Томск, Силәбе, Пермь, Мәләүез, Баймаҡ, Грозный, Омск, Салауат

**6.** Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсер.

1. Беҙҙең ..әмбәт менән ..урағол араһы 5 км.
2. ..ршәк, ..им, ..әрмәсән — йылғалар.

**Ил, ҡала, ауыл, күл, йылға, тау атамалары баш хәрефтән яҙыла: Өфө, Ағиҙел.**

12

## Һөйләм

1. Һөйләмдәргә һүҙ өҫтәп, киңәйтеп яҙ.

1. Йәй килә. 2. Ҡоштар ҡайта. 3. Күбәләктәр оса.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: сәскәнән сәскәгә, йәмле, тыуған яҡ, китап, ҡыш.

2. Һөйләм төҙөп яҙ.







**Һөйләм тамамланған уй-фекерҙе белдерә.**

3. Һөйләмдең сиктәрен билдәлә. Дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

ҡырмыҫҡа һалам ташый йәшел үләндә бәпкәләр йөрөй талда һандуғас һайрай

4. Йомаҡтарҙы сис, яуаптарын шаҡмаҡтарға яҙ.

1. Үҙе аҡ — ҡар түгел,
   Үҙе шыйыҡ — һыу түгел.

2. Өй башында айыу бейей.

3. Өй башында ярты икмәк.

4. Аяҡһыҙ, ҡулһыҙ — ҡапҡа аса.

5. Башы тараҡ, ҡойроғо ураҡ.

6. Ҡыҙарып беште, ергә төштө.



## 13 Хәбәр һөйләм

**1.** Һөйләмдең сиген билдәлә. Уны дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

Өфө ҡалаһы матур уның урамдары йәмле ҡала йорттары бейек урамда сәскәләр күп

**2.** Һорауҙарҙы ҡулланып, үҙең тураһында һөйлә.

1. Исемең кем? 2. Һиңә нисә йәш? 3. Нисәнсе класта уҡыйһың? 4. Һин ҡайҙа (район, ауыл, ҡала) йәшәйһең?

**3.** Йәйәләрҙе асып, күсереп яҙ.

### Тыуған ерем

Тыуған илем — беҙҙең урам,
Тыуған [йағым] — ҡуйы урман,
Тыуған [йәрем] — бешкән балан,
Гөл-сәскәле йәшел [йалан].

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина)

**4.** Мәҡәлдәрҙең дауамын икенсе бағананан табып, берләштереп яҙ. Уларҙың мәғәнәһен аңлат.

| | |
|---|---|
| Аҙ һөйлә, | бер ҡат киҫ. |
| Эше барҙың | күп эшлә. |
| Ете ҡат үлсә, | ашы бар. |

**5.** Кем (нимә) ни эшләй, нисек хәрәкәт итә? Ҡәләм ярҙамында һыҙыҡтар менән тоташтыр. Һүҙбәйләнештәр менән бер нисә һөйләм төҙөп, уҡып ишеттер.



шыуыша



йөҙә



кешнәй



бата



илай



ырғый



мыяулай



уйнаҡлай

**6.** Һүҙҙәр менән һөйләм төҙөп яҙ. Һөйләмдәр нимәһе менән оҡшаштар? Нимәһе менән айырылалар?




Хәбәр һөйләм аҙағында нөктә ҡуйыла.

## 14 Һорау һөйләм

**1.** Һөйләмдәрҙе тейешле интонация менән уҡы. Уларҙың аҙағында ниндәй тамға ҡуйылған? Ни өсөн?

Ниндәй ҡала ҙурыраҡ — Өфөмө әллә Стәрлетамаҡмы?

Ҡайһы хайуан ҙур — айыумы, мышымы?

Ҡайһы йылға оҙонораҡ — Ағиҙелме әллә Һаҡмармы?

Ниндәй планета ҙурыраҡ — Ерме әллә Аймы?

● Өлгө буйынса һорауҙарға яуап бир.

Өлгө: Өфө ҡалаһы Стәрлетамаҡтан ҙурыраҡ.

2. Һөйләмде тулыландырып күсереп яҙ.

1. [ ] ауырлығы 3 кг. 2. Бейә һөтөнән [ ] эшләйҙәр.
3. Аттар [ ] ашарға ярата.
4. Эттәр 15—20 [ ] йәшәй.

3. Һорау һөйләмдәрҙе дөрөҫ уҡы. Уларға бергәләшеп яуап бирегеҙ.

**Белгем килә**

Ҡояш байып йоҡлаһас та,
Ҡайҙа була нурҙары?
Йылға аға бер туҡтамай,
Ҡайҙа китә һыуҙары?

Белгем килә, белгем килә,
Ҡайҙан сығып, ел иҫә?
Һорауҙарым тыуып тора
Бер-бер артлы, бер нисә.

(Миңлеяр Дилмөхәмәтов)

4. Хәбәр һөйләмде һорау һөйләмгә әйләндереп әйт. Был мәлдә һин ниндәй хис-тойғолар кисерәһең (ҡыуаныу, ҡыҙыҡһыныу, ғәжәпләнеү, бойоғоу, һоҡланыу, үпкәләү, үкенеү, икеләнеү)?

1. Һин бөгөн бишле алдың.
2. Тышта көн матур.
3. Һинең ҡустың бәләкәй генә.

5. Һорауҙарға яуап бирегеҙ. Үҙеңә оҡшаған яуапты дәфтәреңә яҙ.

1. Һин нисәнсе класта уҡыйһың?
2. Рәсәйҙең баш ҡалаһы нисек атала?
3. Ер йөҙөндә иң ҙур хайуан нимә?

Һорау һөйләм кем, нимә хаҡында йәки тирә-яҡтағы күренеш, хәл-ваҡиға тураһында белешмә, мәғлүмәт алыу маҡсатында әйтелә.

6.

**Уралтау**

Кәкре ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Уралтау.
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау.

15

# Өндәү һөйләм

1. Һәр герой ниндәй хис-тойғолар кисерә? Һөйләмдәрҙе тейешле интонация менән уҡы.



Эй һин, Ҡылыйкүҙ!



Ниндәй матур минең бәләкәстәрем!

2. Һүҙҙәр менән өндәү һөйләм төҙөп яҙ.

Эх! Абау! Их! Бәй! Һе! Оho! Эй!

3. Хис-тойғоно белдергән һүҙҙәр ҡасан ҡулланыла? Улар менән телдән һөйләмдәр төҙө.

1) ҡотлайым, менән, байрам 2) ғына, етегеҙ, имен-һау, ҡайтып 3) матур, бигерәк, күлдәгең

4. Йомаҡтарҙы сис. Яуаптарын шаҡмаҡҡа яҙып сыҡ.

1. Үҙе аҡ — ҡар түгел,
   Үҙе шыйыҡ — һыу түгел.
2. Өй башында айыу бейей.
3. Эйәре үҙендә — атлан да кит.
4. Ишектән инә, сөйгә ҡуна.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | | ө | | | |
| 2 | | | | | н | | | |
| | | | | 3 | д | | | |
| | һ | ө | й | л | ә | м | | |
| | | | 4 | | ү | | | |

**5.** Өндәү һөйләм аҫтына һыҙ.

## Сәләм

Сәләм, тием, сәләм
Өр-яңы тыуған көнгә.
Сәләм, тиеп көн башлаһам,
Шатлыҡтар ята иңгә.

(Динә Талхина)

**6.** Текстан берәр һорау һәм өндәү һөйләм табып уҡы. Улар бер-береһенән нимәһе менән айырыла?

## Кәзә нисек итеп үҙенә өй һалды?

(Рус халыҡ әкиәте)

— Алмағас! Һинең ботағың аҫтында өй һалырға мөмкинме?

— Ярамай! Алмаларым ергә төшөр ҙә бәрәстәреңде имгәтер. Бар, икенсе ергә кит!

Кәзә шыршы янына килә лә:

— Шыршы! Һинең эргәңдә өй һалырға мөмкинме? — ти.

— Ярамай! Тубырсыҡтарым ҡойолоп, бәрәстәреңде имгәтер. Яҡшыраҡ урын тап!

Кәзә уҫаҡ эргәһенә килә:

— Уҫаҡ! Һинең эргәңдә өй төҙөргә мөмкинме?

— Минең япраҡтарым көн-төн шаулай. Бәрәстәреңә йоҡларға ирек бирмәҫ шул, уңайлыраҡ урын эҙлә!

Кәзә ҡайын янына килә:

— Ҡайын! Һинең эргәңдә өй төҙөргә мөмкинме?

— Төҙө әйҙә! Мин һинең балаларыңды эҫенән һаҡлармын! Ямғырҙан, елдән йәшерермен!



Кәзә ҡыуанып китә. Ул ҡайын янына өй һала, бәрәстәре менән шунда йәшәй башлай.

1. **Уҫаҡ, уңайлы, эҫенән, ирекле, ярамай** һүҙҙәрен юлдан юлға күсерер өсөн ижекләп яҙ.

2. **Япраҡтарым, тубырсыҡтарым** һүҙҙәрендә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе әйт.

16 **Тикшереү эше**

## 17 О-ө хәрефле һүҙҙәр

**1.** Һүҙҙәрҙе ике төркөмгә бүлеп яҙ.

оло, өлкән, ойоҡ, өсөнсө, борос, бөйөк, һөлөк, һоро, ҡорос, көсөк, бөгөн, борон

**2.** Тейешле ижекте табып, һүҙ яһап уҡы.



**3.** Һөйләмгә тейешле һүҙҙе ҡуйып, күсереп яҙ.

Аҡбай — Тәлғәттең ... дуҫы. 1 апрель ... кисәһе булды. Сәлим ... өләсәһенә ҡунаҡҡа килде. Олатайым бейәһен ... менән һыйлай.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: көлкө, тоғро, һоло, бөгөн.

**4.** Шиғырҙы уҡы. **О-ө** хәрефле һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

## Әсәйем өйҙә юҡта

Әсәйем өйҙә булмағас,
Күңелһеҙ миңә бөгөн.
Исмаһам, тинем бесәйгә,
Һөйләшергә юҡ телең.

Килгәйнем тәҙрә янына,
Кескәй генә бер ҡошсоҡ
Ҡоймаға килеп ҡунды ла
Ултыра, китмәй осоп.



Йәлләп ҡуйҙым
шул ҡошсоҡто,
Ниңә күңелһеҙ икән?
Әллә уның да әсәһе
Бөгөн өйҙә юҡ микән?

(Әнисә Таһирова)

**5.** Тейешле ижекте табып, һүҙ яһап уҡы.

| | | | |
|---|---|---|---|
| моң | ло | һө | гөҙ |
| бор | ҡо | бө | лөк |
| һоҫ | ғо | мө | гөн |

**6.** Йомаҡтарҙың төшөп ҡалған һүҙен ҡуйып уҡы. Уларҙы сис.

1. Үкерә лә ______ ,
Бөтә ерҙе тултыра.

3. Йәйен ______ , ҡышын аҡ,
Ҡыҫҡа ______ , шеш ҡолаҡ.

## 18 У-ү хәрефле һүҙҙәр

**1.** Һәр һүҙҙең парын табып, күсереп яҙ.

Өлгө: түрә — тура, күрә — ҡура

була, сүрә, һура, түҙә, бүлә, Сура, уҡына, үтәй, һүрә, туҙа, утай, үкенә

2. Һүрәтле диктант яҙ.
















3. Схемаға ярашлы һүҙҙәр яһап әйт.



**4.** Шиғыр һәм һүрәт буйынса ямғыр тураһында һөйлә.



### Ямғыр

Килде лә болот,
Күк йөҙө тулып,
Ергә һибелде
Тамсылар булып.

Кемдер, дөбөрләп,
Күккә ут яҡты,
Яҡтыртып ҡапыл
Бар тирә-яҡты.

Асыулы ямғыр
Ҡоя ла ҡоя.
Тиҙ генә утты
Һүндереп ҡуя.

(Гөлфиә Юнысова)

 **5.** Шиғыр юлдарының ҡайһыһы ниндәй һүрәткә тура килә? Уҡып ишеттер. Әкиәтте һөйлә.

### Бесәйҙең өйө яна

(Рус халыҡ ижадынан)



Саңҡ-саңҡ! Саң ҡаға,
Бесәйҙең өйө яна!
Бесәйҙең өйө яна!
Төтөнө сыға ана!










**2.** Һүҙҙәрҙе ике төркөмгә бүлеп яҙ. Һүҙ башында һәм уртаһында [э] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана?

эре, кесе, эйәк, мең, эремсек, теремек, үҫемлек, эңер, эйәрә, һепертке, мейес

**3.** Төшөп ҡалған хәрефте ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ.

1. Оло ..йек йылғаһы ташты. 2. ..тенсе майҙа муйыл сәскә атты. 3. Әсәйем ..ремсек ..шләне. 4. Б..сәй м..й..с башында ята.

**4.** Шиғырҙы уҡы. Һорау һөйләмде тап. Уға бергәләшеп яуап бирегеҙ.

Е һүҙ башында, уртаһында һәм э һүҙ башында яҙылған осраҡтарҙы тап.

## Хаҡмы икән был һүҙҙәр?



Теремек тә, зирәк тә мин,
Шундай шаян, шундай шуҡ,
Етмеш ете һөнәр беләм,
Эшләмәгән эшем юҡ...



Атайымдың ерән ҡашҡа
Атҡайына атланып
Елгән саҡта бөтә ауыл
Ҡарай миңә таң ҡалып.



Уҡты ла мин мәргән атам,
Шәп һуғам сәкәнде лә,
Телгә тиһәң, шаҡ ҡатырып
Ҡуйырмын сәсәнде лә.



Гөлдәр шытып сығыр төҫлө
Минең баҫҡан эҙемә.
Бигерәк уңған малаймын, тип
Һоҡланам үҙ-үҙемә.

Ә шулай ҙа ҡайһы саҡта
Ишетәм төрлө һүҙҙәр.
Ни өсөндөр тиҫтерҙәрем
Мине маҡтансыҡ, тиҙәр.
Хаҡмы икән был һүҙҙәр?!

(Абдулхаҡ Игебаев)

5.

**Хәйлә**

— Эшкә китмәһен әсәйем,
Иртәнсәк иртә тороп, —
Тип уйлап алды ла Илдар
Сәғәтте ҡуйҙы бороп.

(Абдулхаҡ Игебаев)

Ээ хәрефе һүҙ башында яҙыла: энә, эшсе. Һүҙ уртаһында (аҙағында) е хәрефе яҙыла: тел, кеше, беренсе.

## 20 Тикшереү эше

## 21 Й хәрефе ҡайҙа һәм ҡасан яҙыла?

**1.** Модель буйынса һүҙҙәр төҙөп уҡы. Уларҙы күҙәт.

**Й** хәрефе һүҙҙең ҡайһы өлөшөндә тора (башы, уртаһы, аҙағы)? Ул ниндәй һуҙынҡылар менән йәнәш яҙыла?




**2.** Һүҙҙәрҙе күҙәт, сағыштыр. Уларҙы төркөмләп яҙ.

йәй, йөҙөк, йүн, йәмле, йыл, йом, йүләр, йома, йәйғор, йылан, йәнәш, йөн, йүгән

**3.** Һүҙҙәрҙә **йә, йө, йү, йе, йо, йы** ҡушымсаларының аҫтына һыҙ.

Бөрйән урманы йәмле. Март айында көндәр ҡояшлы. Йүнсел кеше иртә тора. Һөйөклө әсәйеңде көйҙөрмә.

**4.** Һүҙҙәрҙе өс төркөмгә (**й** хәрефе һүҙ башында, аҙағында, уртаһында) бүлеп яҙ.

көйә, һыбай, сөйәл, һөйәк, турғай, йөнтәҫ, ҡурай, уйсан, йүләр, йәрәхәт, төйәк, йомош

**Й** хәрефе һүҙ башында, уртаһында, аҙағында яҙыла: **йәй, бейә, өй.**

22

## Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәрефтәре

**1.** Һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәрефтәре алдында торған тартынҡылар нисек әйтелә? Нәҙекме, ҡалынмы? Был һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәрефтәре ниндәй эш башҡара?

кухня, Катя, люкс, нефть, Лёня, монтёр, лётчик, ферма, меню, Фёдор, моряк

**2.** Шиғырҙы уҡы. Рус һүҙҙәрен тап. Уларҙың өн моделен эшлә. **ё, ь** хәрефтәре һүҙҙә ниндәй эш башҡара?

### Шахтёр

Шахтёр таба таш күмер,
Өйгә яғыулыҡ булыр.
Аҡ тештәре ялтырай,
Ҡулында фонарь шалтырай.

**3.** Предметты белдергән һүҙҙең өн моделен ҡулланып, транскрипцияла яҙ. Был һүҙҙәрҙе орфографик һүҙлектән ҡара.

  

**4.** Өн моделенә ярашлы рус исемдәрен транскрипцияла, аҙаҡтан хәрефтәр менән яҙ.



[к ... ]



[в ... ]



[л ... ]



[п’ ... ]



[л’ ....]

**5.** Транскрипциялағы һүҙҙәрҙе хәрефтәр менән яҙып ал. **е, ё, ю, я** хәрефтәренең һүҙҙә ниндәй эш башҡарыуын аңлат. Аҙаҡтан һүҙҙәрҙе һүҙлек буйынса тикшер.

[п’эт’а], [т’ул’эн’], [п’энал], [ал’аска], [г’эрой’], [пол’ус]

**6.** Һүҙҙәрҙе төркөмләп әйт. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе яттан яҙ.

флейта, тюль, флюгер, **тюльпан**, сюрприз, рейс, **педаль, кедр, дежур, боксёр, самолёт**

Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **я, е, ё, ю** хәрефтәре тартынҡыларҙы нәҙек (йомшаҡ) әйтеүгә булышлыҡ итә: [кухн’а] — кухня, [к’эдр] — кедр, [л’ук] — люк һ. б.

## 23 Ю хәрефе

1. Транскрипциялағы һүҙҙәрҙе хәрефтәр менән яҙ.

[йурамал], [йурған], [йурау], [йулаҡ]

2. Предметты белдергән һүҙҙәрҙе транскрипцияла яҙ. Унан — хәрефтәр менән.







[ ] [ ] [ ]

3. Һөйләм төҙөп яҙ.




һатып алдым.

[йуха] төлкө йәшенде.



Африкала йәшәй.

**Ю** хәрефе һүҙ башында **[йу]** өндәре менән тамғалана: **юл, юртаҡ.**

**24**

## Е хәрефе

**1.** Предметты белдергән һүҙҙе тәүҙә транскрипциялаа, аҙаҡ хәрефтәр менән яҙ.





**2.** Мәҡәлдең дауамын табып уҡы. Орфограммаларҙы аңлат.

| | |
|---|---|
| Болот елгә | экән — күлендә. |
| Туйынған да — ер, | ир тыуған илендә. |
| Ерле — ерендә, | каршы йөрөмәй. |
| Ат туйған ерендә, | һыйынған да — ер. |

**3.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп дәфтәреңә яҙ.

[йәҫ], [йэгэт], [йэңэү], [йэпшэк], [йэрэн], [йэтэм], [йэбэк]

4. Уҡы. Шиғырҙың йөкмәткеһе һәм һүрәттәр буйынса хикәйә төҙөп һөйлә.

## Сәтләүек



Сәтләүек ҡыуағындағы
Емешкә күҙ һалғас та:
— Ерҙәге еләктәр бешкән,
Бешмәгән, — ти, —
ағаста.



Ҡояшҡа ла яҡыныраҡ —
Бейектә бит был емеш.
Ашап ҡарап булмай инде
Уны бешмәгән килеш.

(Әлфиә Әсәҙуллина)

5. Һөйләмдәрҙе тулыландырып яҙ.

1.  күл буйында үҫә. 2. Әсәйем  ҡаҡ ҡойҙо. 3. [Юлайға] 7 йәш тулды.

> **Е** хәрефе һүҙ башында **[йэ]** өндәре менән тамғалана: еләк, еңмеш.

# 25 Я хәрефе

1. Предметты белдергән һүҙҙе әйт, тыңла. Унда нисә өн? Нисә хәреф?





2. Ижектәрҙән һүҙ төҙөп яҙ.




**Я хәрефе һүҙҙең башында ла, уртаһында ла, аҙағында ла яҙыла: яра, таяҡ, һарғая.**

3. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә нисә хәреф? Нисә өн?

## Ямғыр



Шыбыр-шыбыр ямғыр **яуа**,
Беҙ өйҙә ултырабыҙ.
**Ямғыр** яуып туҡтағанды
Көтөп кенә торабыҙ.

Ямғыр тымғас та урамға
Йүгерешеп сығабыҙ.
«**Ҡояш**, сыҡ-сыҡ тиҙерәк!» —
тип,
Шатланып ҡысҡырабыҙ.

(М. Бикбаева)

4.

1. Яйыҡ буйлап ямғыр яуа.
2. Шаян Раян шаяра.
3. Яңы сынаяҡ ялтырай.

## 26 Һүҙҙә [йа] өндәрен хәреф менән тамғалау

1. Һөйләмдәр төҙөп, дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

1. [йамал]  [йарҙы].

2. Ағастар  [йарҙы].

4.  [айауhыҙ] ҡыҙҙыра.

**2.** Транскрипциялағы hүҙҙе күҙәт. Унда нисә өн? Нисә хәреф?

### Ҡыш

Аҡ ҡар баҫҡан [йаланды],
Ҡураларҙы, соланды,
[йабалаҡлап] ҡар [йауа],
Бөгөн буранлы hауа.
Иртә hалҡын [йаланда]
Ҡар бураны hеперә.

(Дауыт Юлтый)

**3.** Балаларҙың исемдәрен тәүҙә транскрипциялa, аҙаҡ хәрефтәр менән яҙ.


[йу . . .]


[йа . . .]


[йа . . .]

**4.** Һүҙҙең икенсе яртыһын табып уҡы. Иң күп өнлө һүҙҙе әйт.

| | | | |
|---|---|---|---|
| бу | лыҡ | ма | яш |
| яу | ҡуп | ҡо | ян |
| Я | я | ша | яҡ |

**Һүҙҙәрҙә й һәм а хәрефтәре йәнәш яҙылмай.**
**Һүҙҙә [йа] өндәре я хәрефе менән тамғалана: ялан, ярыҡ, яман.**

## 27 Тикшереү эше

## 28 Предметты белдергән һүҙҙәр

**1.** Артыҡ һүҙҙе билдәлә. Ни өсөн артыҡ? Аңлат.

1) көн, төн, ҡыш, ҡар, ~~уйынсыҡ~~, ел
2) шар, туп, алма, ҡояш, ~~китап~~
3) бейәләй, һарыҡ, тун, ~~күлдәк~~
5) йондоҙ, ай, ҡояш, ~~итек~~, ер

**2.** Һөттән әҙерләнгән ашамлыҡтарҙың исемдәрен теҙеп яҙ.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ҡ | | й | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | р | | | | | к |

| | | |
|---|---|---|
| | | й |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ҡ | | | ы | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | о | | о | |

**3.** Шиғырҙарҙы яттан яҙ.

## Ҡыш булғас

Ҡар яуғас,
Ҡыш булғас,
Бар ағас
Яланғас.

(Рәми Ғарипов)

## Яҙ булғас

Йәшәрә үлән,
Йылмая ҡояш.
Тыуған яғына
Ҡайтты ҡарлуғас.

(Алексей Плещеев)

**4.** Һүрәтле диктант яҙ.









**5.** Йомаҡтарҙы сис, яуаптарын шаҡмаҡтарға яҙ.



1. Энәле йомғаҡ.
2. Күктән килде, ергә китте.
3. Яҙ килһә, кейенә, көҙ килһә, сисенә.
4. Ике үркәсле була, һыуһыҙ ҙа йәшәй ала.
5. Елбикә алып килгәнде
Ербикә ҡабул иткән.
6. Осо нәҙек, төбө йыуан, ярата уны ҡуян.
7. Дүрт кешегә бер эшләпә.

Предметты күреп, тотоп ҡарап була. Һәр предметтың үҙ атамаһы (исеме) бар. Предметты белдергән һүҙҙәр **кем? нимә?** һорауҙарына яуап була.

## 29 Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр

**1.** Предметтың атамаһын һәм уның билдәһен белдергән һүҙҙәрҙе (һүҙбәйләнеште) әйт.

### Болон



Йәшел хәтфә кеүек матур
болон
Нурҙар сәсеп ята донъяға,
Һығылып үҫкән талдар
араһынан
Көмөш таҫма кеүек һыу аға.

Леп-леп итеп оса күбәләктәр,
Сутылдашып һайрай ҡоштары.
Ал, ҡыҙыл, аҡ, һары сәскә менән
Биҙәкләнгән үлән баштары.

(Мәжит Ғафури)

**2.** Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ.

1. ☐ ☐ әсәһен бик һағынды.
2. Баҡсасы ☐ сәскәләр үҫтерә.
3. ☐ күктә ☐ болоттар йөҙә.

**3.** Һүҙҙәр ниндәй һүрәтте асыҡлай? Улар менән һүҙбәйләнеш төҙө. Үҙеңә оҡшағаны менән һөйләм төҙөп әйт.



4. Предметтың билдәләрен табып, уларҙы парлап яҙ.

| | | |
|---|---|---|
| һутлы | әсе | уҫал |
| эт | алма | һуған |

5. Һүҙҙәр ниндәй йыл миҙгеле тураһында һөйләй? Улар менән һүҙбәйләнештәр төҙөп әйт.

буранлы, ҡарлы, һыуыҡ, саф, һалҡын; эҫе, томра, йәмле, йәшел, йылы, сәскәле; һары, моңһоу, ямғырлы, йонсоу, алтын

Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр уның төҫөн (аҡ, ҡара, һары һ. б.), тышҡы (ҡаты, аяҙ, шыма) һәм эске (күңелле, шат, саф) сифаттарын аңлата. Улар **ниндәй?** һорауына яуап була.

## 30 Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр

1. Бирелгән һүҙҙәр нимәне белдерә? Уларҙы күсереп яҙ.

1) ... яба, һыҙғыра, өрә, иҫә, уйнай
2) ... уйлана, ҡайғырта, борсола, ярата
3) ... аға, сылтырай, ялтырай

**2.** Предметтарҙың атамаһын шаҡмаҡтарға яҙ. Улар ниндәй эш-хәрәкәт башҡара?




**3.** Әкиәттең башын уҡы. Дауам ит. Һөйлә.





Урманда ҡуян менән төлкө йәшәгән, ти. Бик дуҫ булғандар улар. Һәр береһе үҙ ҡойроғон яратҡан. Төлкөнөң ҡойроғо ерән. Ул ем-ем итеп, ялтырап торған. Ҡуяндың ҡойроғо мамыҡ кеүек йомшаҡ, һөт кеүек аҡ булған...

**4.** Өҙөктө уҡы. Һүрәтте иғтибар менән өйрән. Һәр кейеккә хас сифатты, ул башҡарған эште (хәрәкәтте) ата. Хәрәкәтте белдергән һүҙҙәрҙе һанап сыҡ.



## Ҡайын һағыҙы

Айыу малайы урманда сауҙа асып ебәргән. Хас та ҡалалағы кеүек. Кибеттә төҫлө ҡағыҙға төрөлгән һағыҙҙар, шоколадтар бар. Бер ҡуян кишер һатып алды. Сиратта бүре, төлкө балалары тора. Бурһыҡ ҡыҙыҡайы киптерелгән ҡурай еләге һорай. Ә терпе

балаһы Энәләкәй ҡайын һағыҙы алырға килгән.

(Салауат Кәрим буйынса)

● Һатыусы айыу балаһы ни эшләй? Бүре, төлкө, бурһыҡ, терпе балалары? Һин уларҙы ниндәй итеп күҙ алдына килтерәһең? «Белешмә өсөн һүҙҙәр»ҙе ҡуллан.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: һата, белеште, ҡыҙыҡһынды, күҙе төштө, ҡыуанды, ҡәнәғәт, оялсан, ҡыйыуһыҙ, зирәк, үткен, түҙемле, яғымлы, йомшаҡ, иғтибарлы, шат.

4. Һөйләмгә тейешле һүҙҙе ҡуйып иштеттер. Хәрәкәтте белдергән һүҙҙе бәйләнеп килгән һүҙе (һүҙбәйләнеш) менән яҙып ал.

## Пар сыйырсыҡ

Илнур сыйырсыҡ ояһы _____ . Уны ҡайын ағасына _____ . Ҡоштар оҙаҡ көттөрмәне. Иртәнсәк пар сыйырсыҡтар оя башында ине.

| |
|---|
| Предметтың эшен, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр **ни эшләй?** һорауына яуап булалар. |

# 31 Ярҙамсы һүҙҙәр: **һәм, менән**

?




**1.** Һүрәттәр буйынса ярҙамсы һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙө. Улар менән 2–3 һөйләм төҙөп әйт.







**2.** Ярҙамсы һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ. Улар ни өсөн кәрәк? Аңлат.

1. Ғайса менән Ғәлим — дуҫтар. 2. Һоро-сай менән Аҡбай бик татыуҙар. 3. Өләсәйем таң менән тора. 4. Йәй һәм ҡышты мин яратам.

3. Һәр һөйләмде һорау һөйләмгә әйләндереп әйт. Был һорауға яуап биреүҙәрен үтен.

## Тәүге ямғыр

Күк йөҙө болоттар менән ҡапланды. Көн ҡараңғыланды. Яйлап ямғыр күҙе төшә башланы. Тора-бара ул көсәйҙе. Тәүге яҙғы ямғыр яуып үтте. Бөтә тирә-йүн таҙарҙы.

4. Класта кемдең кем менән ултырыуын парлап 6 кеше исемен яҙ.

Өлгө: Сәриә **менән** Азамат
йәки
Сәриә **һәм** Азамат

**Һәм, менән** ярҙамсы һүҙҙәре һөйләмдә ике һүҙҙе мәғәнәүи яҡтан бәйләү өсөн ҡулланыла.
**Һәм, менән** ярҙамсы һүҙҙәре айырым торғанда бер ниндәй ҙә мәғәнәгә эйә түгел.

32

## Ярҙамсы һүҙҙәр:
## да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә

1. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе тап. Уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлат.

1) Ямғыр туҡтамай яуҙы ла яуҙы. 2) Бейә ҡымыҙы тәмле лә, файҙалы ла. 3) Гөлбикә

йүгерә лә йүгерә. Йомғаҡ тәгәрәй ҙә тәгәрәй.
4) Заһит та, Кәрим дә 1-се класта уҡыйҙар.




Да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә ярҙамсы һүҙҙәре айырым яҙыла.

**2.** Һөйләмдәр төҙөп яҙ.

1.  △,  △ һүрәтте матур төшөрәләр.

2.  △,  △ — йорт хайуандары.

3.  △,  △ — емештәр.

**3.** Тексты уҡы. Уны һөйләргә өйрән. Унан ярҙамсы һүҙҙәрҙе табып әйт.

## Сыйырсыҡ балаһы

Ҡошсоҡ ояһынан йығылып төштө. Әлфиә ҡошсоҡто усына алып, өйгә йүгерҙе.

Ҡыҙ уға ярма һалды, һыу ҡуйҙы. Ҡош муйынын бер яҡҡа ҡыйыш һалып, ултыра бирҙе. Ул ярма ла суҡыманы, һыу ҙа эсмәне. Әллә ауырыймы икән? Әлфиә уға дарыу ҙа ҡаптырырға маташты. Ҡошсоҡ уны ла ҡапманы. Бәләкәстәр дарыу эсергә яратмай шул.

(Мостай Кәрим)

4. Тейешле ярҙамсы һүҙҙе ҡуйып, күсереп яҙ.

**Сәскәләр**

Ал сәскә ... бал бирә,
Күк сәскә ... бал бирә,
Һарыһы ... бал бирә,
Барыһы ... бал бирә.

(Ғариф Ғүмәр)

**Мәҡәлдәр**

Хаҡ эште халыҡ һөйөр.
Һөнәре бар юғалмаç.

**Да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә** ярҙамсы һүҙҙәре айырым яҙыла: Әсәйемде **лә**, атайымды **ла** яратам.

33

# Ярҙамсы һүҙҙәр: ғына — генә, ҡына — кенә

1. Һүрәтте ҡулланып, һөйләм төҙөп әйт.

















2. Тейешле һүҙҙәр ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ.

1. Балан әсе, ә ер еләге  .
2. Минең әсәйем  .
3.  ауылы тау битендә  урынлашҡан.
4. Алыҫтан  моң ағыла.

△ → ғына — генә
△ → ҡына — кенә

Ғына — генә, ҡына — кенә ярҙамсы һүҙҙәре айырым яҙыла.

**3.** Һүҙҙәрҙе кәрәкле ярҙамсы һүҙҙәр менән бәйләп әйт. Улар менән телдән һөйләмдәр төҙө.

| | | | |
|---|---|---|---|
| көсһөҙ | ҡына | бирәү | ғына |
| ҡурҡаҡ | кенә | ауылда | генә |

**4.** Ярҙамсы һүҙҙәр ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ.

1. Кисә сәғәт өстә △ башлана. 2. Айҙарҙың иншаһы матур △ . 3. Бесәнлеккә төшкә △ барып еттек. 4. Тау бите һөҙәк △ .

## 34 Тикшереү эше

**Тест һорауҙары. Дөрөҫ яуапты табып уҡы**

## Алфавит

1. Алфавитта нисә хәреф? Дөрөҫ яуапты уҡы.

- башҡорт алфавитында 42
- инглиз алфавитында 26
- рус алфавитында 33

**2.** Башҡорт алфавитының иң аҙағында торған дүрт хәреф-тамғаны тап.

- ъ, ь, ю, я
- ә, э, ю, я
- ы, э, ю, я

**3.** Һүҙҙе юлдан юлға нисек итеп күсерергә ярамай?

- һүҙҙең бер генә хәрефе юлда ҡалдырылмай
- һүҙҙең бер генә хәрефе икенсе юлға күсерелә
- һүҙҙең бер генә хәрефен икенсе юлға күсерергә ярай

**4.** Парлы һаңғырау-яңғырау тартынҡылар рәтен табып уҡы.

б-п, в-ф, д-т, г-к, ғ-ҡ, ҙ-ҫ, ж-ш, з-с

б-п, г-к, ғ-ҡ, л-м, д-т, в-ф, ж-ш, з-с

**5.** Төшөп ҡалған һүҙҙе ҡуйып уҡы.

[а], [ө], [ү], [и], [э] — һуҙынҡы ...

а, о, у, ы — һуҙынҡы ...

## Баш хәреф

**1.** Ер-һыу атамаларын уҡы.

Ыҡ, Таһир, Рәсәй, Ағиҙел, Туҡбаев

**2.** Хата яҙылған һүҙҙәрҙе табып уҡы.

ҡала, тәлғәт, Саптар, Ауыл, Һаҡмар

**3.** Ниндәй һүҙҙәр баш хәрефтән яҙыла?

ай исемдәре, хайуан ҡушаматтары, ҡала исемдәре, сәскә исемдәре

## Һөйләм

**1.** Бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләм төҙөп яҙ.

таҙарта, йылға, балыҡ, Шамил, буйында
бәлеш, әсәйем, алманан, бешерҙе, тәмле

**2.** Һөйләм нимә белдерә?

Һөйләм ... уй ... белдерә.

**3.** Һөйләм аҙағында ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?

- өтөр
- нөктә

- hopay билдәhe
- өндәү билдәhe

## Э, о, ө хәрефтәре

1. Нәҙек hуҙынҡылы hүҙҙәрҙе генә уҡы.

осҡон, өсөн, кәрәҙ, бурыс, көҙән, сирек

2. Ээ хәрефе hүҙҙең ҡайhы өлөшөндә яҙыла?

- hүҙ уртаhында
- hүҙ башында ғына
- hүҙҙең башында ла, уртаhында ла

3. Дөрөҫ яуапты уҡы.

- [э] өнө hүҙ уртаhында е хәрефе менән тамғалана
- [э] өнө hүҙ башында е хәрефе менән тамғалана

4. Ҡайhы hүҙгә ө хәрефе, ә ҡайhыныhында о хәрефе ҡуйhаң, hүҙ килеп сыға?

бол . н, к . рәк, б . таҡ, с . йәл, h . йәк, б . таҡ, к . йәнтә

5. Ҡайһы рәттәге һүҙҙәрҙә **йе** ҡушымсаһы яҙыла?

- [йәләк], [йәмәш], [бәйәк], [йәгәт]
- [тәйәш], [мәйәс], [кәйәк], [әсәйәм]

## Е, ё, й, я хәрефтәре

1. **Й** хәрефе һүҙҙең ҡайһы өлөшөндә яҙыла? Һәр осраҡҡа миҫалдар килтер.

- һүҙ башында
- һүҙ уртаһында
- һүҙ аҙағында

2. Һүҙҙең башында **[йа]** өндәре ишетелгән урында ниндәй хәреф яҙыла?

- **й** һәм **а** хәрефтәре яҙыла
- **я** хәрефе яҙыла

3. **Монтёр** һүҙе транскрипцияла нисек яҙыла? Дөрөҫ яуапты күрһәт.

- [мантёр]   [мант’ор]

4. **Кухня, Аляска, Ваня** һүҙҙәрендә **я** хәрефе ниндәй эш башҡара?

**5. Я** хәрефе һүҙҙең ҡайһы өлөшөндә яҙыла?

- һүҙҙең башында ғына яҙыла
- һүҙҙең аҙағында ғына яҙыла
- һүҙҙең башында ла, уртаһында ла, аҙағында ла яҙыла

## Предметтың атамаһы, билдәһе, хәрәкәте

1. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәрҙе уҡы.

шарлауыҡ, ялтыр, ялтырай, саба, ҡурҡаҡ, шыуыша, мәмерйә

2. **Ниндәй?** һорауына яуап булған һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнә инә?

- предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр
- предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр
- предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр

3. Ярҙамсы һүҙҙәр **ғына-генә, ҡына-кенә** нисек яҙыла?

- алдында торған һүҙгә ҡушып яҙыла
- алдында торған һүҙҙән айырым яҙыла

**4.** Схемаға ярашлы һүҙбәйләнештәрҙе уҡы.



көслө йәшен, урамға сыҡты, ҡыҙыҡ китап, шәл бәйләй, мауыҡтырғыс фильм, күренекле яҙыусы, шәп йүгерә, йылғыр ҡош

**5.** Предметҡа ниндәй үҙенсәлектәр хас? Һүҙгә?

- Предметты ҡулдар менән тотоп, күҙҙәр менән күреп була
- Һүҙҙе әйтәбеҙ, ишетәбеҙ, яҙабыҙ
- Һүҙҙе лә, предметты ла әйтәбеҙ һәм ишетәбеҙ

**Йөкмәткеһе**


Алфавит . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Хәреф һәм өн . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
Һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 9
Тартынҡы өндәр һәм хәрефтәр . . . . . . . . . . . . . . . . . 12
Нәҙек һәм ҡалын әйтелешле һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . 14
Һүҙҙе ижеккә бүлеү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 16
Һүҙҙе юлдан юлға күсереү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 19
Тикшереү эше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 21
Баш хәреф. Исем-фамилияларҙың яҙылышы . . . . . . . . 21
Хайуан ҡушаматтары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 23
Ер-һыу атамалары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 25
Һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 28
Хәбәр һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 31
Һорау һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 33
Өндәү һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 36
Тикшереү эше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
**О-ө** хәрефле һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
**У-ү** хәрефле һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
**Э** хәрефе һүҙ башында. Һүҙ уртаһында е хәрефе, [э] өнө . . . . . 45
Тикшереү эше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 48
**Й** хәрефе ҡайҙа һәм ҡасан яҙыла? . . . . . . . . . . . . . . 48
Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәрефтәре . . . . . . . . 50
**Ю** хәрефе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 53
**Е** хәрефе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 54
**Я** хәрефе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 56
Һүҙҙә [йа] өндәрен хәреф менән тамғалау . . . . . . . . . . 57
Тикшереү эше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 59
Предметты белдергән һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 59
Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр . . . . . . . . . . . 61
Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр . . . . . . 63
Ярҙамсы һүҙҙәр: **һәм, менән** . . . . . . . . . . . . . . . . . 67
Ярҙамсы һүҙҙәр: **да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә** . . . . . . . . 68
Ярҙамсы һүҙҙәр: **ғына-генә, ҡына-кенә** . . . . . . . . . . 71
Тикшереү эше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 72

Учебное издание

СЫНБУЛАТОВА Фания Шугаиповна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**для 1 класса башкирской школы**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *Гөлсәсәк Раянова*
Мөхәррире *Сәлимә Аҡъюлова*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Венера Абдрахманова*
Корректоры *Гөлсинә Попова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 08.02.12. Форматы 70×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 5,0+0,25 форзацы. Шартлы буяу отт. 25,15. Иҫәп-нәшер таб. 2,12+0,525 форзацы. Тиражы 7 500 дана. Заказ 1.0007.12.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

# Орфогра



Кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме баш хәрефтән яҙыла:

**Түләбаев Ғәлинур Илдар улы.**

Хайуан ҡушаматтары баш хәрефтән яҙыла:

**Саптар, Йондоҙ**



Ике өндө белдергән хәрефтәр:
**я, е, ё, ю.**



**еләк**



**юл**



**япраҡ**



**ёлка**

# аммалар

Ярҙамсы һүҙҙәр айырым яҙыла:
- **һәм, менән;**
- **ғына, генә; ҡына, кенә;**
- **ла-лә, да-дә, та-тә, ҙа-ҙә.**



а) Әмир **һәм** Зилә



б) ҡыҙыл **ғына** мәк





в) Әлиә **лә**, Гөлсөм **дә**, Алһыу **ҙа** ... .